*Рафаэль АҘНАҒОЛОВ,*
*Башҡортостан Республикаһы*
*халыҡ мәғарифының*
*атҡаҙанған хеҙмәткәре*



# БАЛА

## КҮҢЕЛЕНӘ ЮЛ

Төрлө мәктәптәрҙә булғаным бар. Уҡытыусыларҙың да төрлөһөн күрергә, уларҙың дәресенә мәктәп етәкселәренең төрлөсә баһаһын ишетергә тура килде. Мәҫәлән, шундай һөйләшеү хәтеремдән сыҡмай:

— Өҫтәлмә материал күренмәне дәресегеҙҙә, — ти директор.

— Уға түгел, программа материалына ваҡыт еткереп булмай, — тигәйне уҡытыусы.

Икенсе бер мәктәптә шундай хәлдең тап киреһенә шаһит булдым:

— Программа материалынан ситкә китеү булды был дәресең, — тип битәрләне уҡытыусыны директор.

— Эйе, белә күрә ситләштем, сөнки программа материалы менән генә баланы үҫтереп булмай, — тип аҡланғайны уҡытыусы.

Ошо һөйләшеүҙән сығып, республикабыҙ мәктәптәрендәге хәлде, башҡорт теле һәм әҙәбиәтен өйрәнеүҙең торошон, уҡытыусыларҙың эш тәжрибәһен, етәкселәрҙең талабын, баһаһын күҙалларға була. Тәүге осраҡта мәктәп етәксеһе уҡытыусыны ижади эшләүгә саҡырһа, икенсеһендә уға программа сиктәренән тайпылмаҫҡа ҡуша. Уҡытыусыларҙың да төрлөһө бар: берәүҙәре ижади эшләүҙе хуп күрһә, икенселәре дәреслеккә, программаға сат йәбешеп ята. Ҡайһы берәүҙәре, бер дәрес эсендә ҡырылмаһа ҡырҡ төрлө эш тәҡдим итеп, балаға яйлап үҙенсә уйланырға, фекер йөрөтөргә ирек бирмәй. Был инде үҙен күрһәтергә тырышҡан уҡытыусының ғәҙәти эш алымы, эш методикаһы тип ҡарала. Дәрес — уҡытыусының бик ауыр хеҙмәте.

Мәктәп мөхитендә баланың дөйөм үҫеше, рухи сынығыуы, ижади һәләтенең асылыуы етәксенең айыҡ ҡарашынан, уҡытыусының аныҡ эшенән тора. Ижади эшләгән уҡытыусы, дәрес барышында килеп тыуған шарттарға ҡарап, дәрес планын да үҙгәртеп ебәрә ала. Кисә төҙөлгән дәрес планы бөгөнгөгә ярамаҫҡа мөмкин. Шуға ла «аныҡ эшенән» тигәнде аныҡ йүнәлештә алып барылған эшенән тип алыу кәрәктер. Сөнки белем биреү кеүек даими үҙгәреп тороусан ҙур эште ҡалыплаштырыуҙың һис кәрәге юҡ.

Бала күңеленә, рухи донъяһына юлды ҡалыплашҡан алымдар менән һалып булмай.

Методик әҙәбиәттә дәрес шарттарында дидактик принциптарҙың берҙәмлеген, уларҙың үҙ-ара бәйләнешен иҫәпкә алыуға баҫым яһала. Дидактик принциптар дәрестең маҡсатына һәм уҡыу материалына нигеҙләнә. Әммә дәрес ваҡытында уҡытыусы «был принципты йә тегеһен ҡулланайым әле» тип торһа, дәрескә ҡуйылған төп маҡсатынан ситкә китеп ҡуйыуы бар. Төп маҡсатҡа ынтылғанда (бигерәк тә асыҡ дәрестәрҙә) өҫтәлмә йәғни «тағылма аҡыл» (дидактик принциптар тураһында уйлап торорға форсат та, ваҡыт та етмәй, дөрөҫөн әйткәндә, принциптарҙың был осраҡта кәрәге лә юҡ.

Һәр уҡыу-уҡытыу принцибын уҡытыусы үҙ күңел түрендә, күңел лабораторияһында анализлай, эшкәртә. Принциптарҙың ҡайһы берҙәре йә идеялары төшөрөп ҡалдырыла, ҡайһы берҙәре ижади үҫтерелә, камиллаштырыла, дәрес темаһына, кластың әҙерлек мөмкинлегенә ҡулайлаштырыла. Үҙ тәжрибәһенән сығып, уҡытыусы теге йәки был принциптың нигеҙенә өҫтәмәләр индерә. Тимәк, дәрестә әҙер, үҙгәртмәй ҡулланырлыҡ, бөтә

яҡлап та ҡулай (универсаль) һәм камил принциптар эшләнмәгән. Шуға күрә методик принциптарҙың, алымдарҙың, ысулдарҙың ниндәйе генә булмаһын, һәр береһе уҡытыусы тарафынан эшкәртелә һәм дәрес шарттарына алдан уҡ ҡулайлаштырыла. Дәрестә уҡытыусы бары тик маҡсаттың бойомға ашыуы тураһында ғына хәстәрлек күрә.

Дәрестең маҡсаты үҙе бер нисә төргә бүленә: балаға тәғәйен белем биреү, дәрес материалы аша тәрбиәүи сараны бойомға ашырыу, баланың күңел донъяһын үҫтереү. Дидактиканың берҙәм өс маҡсаты үҙ-ара бик тығыҙ бәйләнгән, бер-береһенә ҡушылған. Уларҙы бер-береһенән айырып ҡарап булмай. Мәҫәлән, белем биреү үҙе үк үҫтереү һәм тәрбиә биреү кеүек төшөнсәләрҙе үҙ эсенә ала; тәрбиә биреү шулай уҡ нимәгәлер өйрәтеү аша баланың күңел донъяһын үҫтереү менән айырылғыһыҙ бәйләнештә тора. Дәрестең маҡсаты — баланың рухи үҫешенә нимәлер өҫтәү, күңеленә уй һалыу, үҙен уратып алған бихисап предметтарҙың, хәл-ваҡиғаларҙың, күренештәрҙең исмаһам береһенә булһа ла баланың үҙбаһаһын булдырыу, үҙ мөнәсәбәтен уятыу өсөн йүнәлеш биреү ул.

Уҡыусы һәм уҡытыусы...

Ошо төшөнсәләр аша тормош бара, төрлө үҙгәрештәр кисерә. Һәр осорҙа ул төшөнсәләр төрлөсә атап йөрөтөлгән: шәкерт һәм мөғәллим, һабаҡ алыусы һәм һабаҡ биреүсе, уҡыусы һәм уҡытыусы... Улар араһындағы бер-береһенә булған мөнәсәбәт тә төрлөсә булған. Ғилми әҙәбиәттә уҡыусы менән уҡытыусы араһындағы мөғәмәлә педагогик һәм психологик үҙ-ара мөнәсәбәт тип ҡарала. Тормошҡа һәм йәмғиәттәге кешеләргә, хәл-ваҡиғаларға, тирә-яҡ мөхиткә булған ҡараштары, инаныуҙары, уй-хыялдары, кисерештәре бала һәм ата-әсә, бала һәм ғаилә, бала һәм уҡытыусы, бала һәм коллектив араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәттәр аша формалаша. Шулар араһында уҡыусы менән уҡытыусының үҙ-ара мөнәсәбәте айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә. Уларҙың береһе өйрәнеүсе, икенсеһе өйрәтеүсе сифатында йәшәй, эҙләнә, ижад итә.

Белем алыу ниндәйерәк шарттарҙа еңелерәк хәл ителә? Ул шарттарҙың иң мөһиме нимәлә күренә? Әлбиттә, ышаныс биреүсе, хатаңды төҙәтеп, дөрөҫ юлға төшөрөүсе, үҙеңә тәғәйен белем алыу эҙенән эйҙәүсе, эйәртеүсе кешең булғанда, бала үҙенең артында рәсми уҡытыусыны түгел, ә эскерһеҙ ярҙамсы тороуын тоя.

Баланың үҫеүендә уҡытыусы ярҙам итергә бурыслы. Иң мөһиме — баланы үҫтереү. Ә уны үҫтереү өсөн, беренсенән, белем алыуҙы баланың төп маҡсатына әйләндерергә тырышырға кәрәк. Бала үҙ белеменең тәүге емештәрен-һөҙөмтәһен күреп ҡыуанһын. Белем алыу — бала өсөн бик ауыр хеҙмәт. Ана шул хеҙмәтенең бәләкәй генә уңыштарын, үҙенсә асыштарын ваҡытында күрә белергә, тәғәйен баһаһын (оценкаларҙан тыш) бирә барырға, йәғни баланың күңелен үҫтерергә, дәртен һүндермәҫкә тейешбеҙ.

Уҡыусы—уҡытыусы—класс мөхите бер-береһенә ижадташ, хеҙмәттәш мөнәсәбәттә булғанда ғына белем алыу еңеләйә. Ғәҙәттә, баланы тормошҡа әҙерләйбеҙ, тиҙәр. Был ҡараш нигеҙҙә дөрөҫ түгел. Бала шул тормоштоң үҙендә йәшәй ҙәһә. Тағы ла ниндәй тормошто күҙ алдына килтерәләр икән? Бала ысынбырлыҡтағы тормоштоң бер өлөшө, бер биҙәге. Ул өлөш, ул биҙәк ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш? Бәлки шул юҫыҡта һүҙ алып барыу кәрәктер. Ысынбарлыҡтың бер өлөшө булған баланың әҙәп-әхлаҡ, рухи ҡомары, теләге ниндәй? Шул сифаттары өйрәнелгәнме? Баланың эске донъяһын кем асыҡлар? Баланы өйрәнеү аша уға белем үҙләштереү кимәлен билдәләү мөһим. Уҡытыусы уға белем биреүсе булып түгел, ә үҙләштерергә тейеш белем күләмен билдәләүсе сифатын алырға тейеш. Билдәләнгән белем күләме менән бала араһында уҡытыусы бары тик арасы, улай ғына ла түгел, хеҙмәттәшлек итергә әҙер тороусы вазифаһын башҡара. Үҙаллы белем үҙләштереүҙә ҡыйынлыҡ килеп тыуһа, шул саҡта ғына уҡытыусы тәғәйен йүнәлеш бирергә тейеш. Үҙаллы белем алыуҙа класс мөхите лә ҙур роль уйнай. Һәр бала бер-береһенә теләктәшлек, хеҙмәттәшлек итергә әҙер торған саҡта баланың үҙаллы белем алыуға булған ынтылышы даими йәшәү мәғәнәһенә әйләнә. Белем кимәлеңде туҡтауһыҙ күтәреү — тормош талабы. Бала ана шуны төшөнөргә тейеш. Бары тик шул саҡта ғына ул белекле була ала. Ә белекле булыу, йәғни булған белемде тормошта ҡуллана алыу, шәхестең иң мөһим сифаттарының береһе.

Һәр бала — асылмаған бөрө. Ана шул бөрө матур, күркәм сәскәгә әйләнһен өсөн, иң беренсе сиратта, йылылыҡ кәрәк. Уҡытыусы балаға йылы һүҙен йәлләмәҫкә тейеш. Йылы һүҙ күп

мәғәнәне үҙ эсенә ала. Беренсенән, баланы кеше итеп ҡарау мөһим. Кешегә кешеләрсә мөнәсәбәт һәр ваҡыт кәрәк. Бала күңеле шар асыҡ була, уға тик изгелек, игелек, мәрхәмәтлек кеүек хис-тойғолар ғына һалынһын ине. Уҡытыусы күңеленән бала күңеленә бәғерһеҙлек кенә юлыҡмаһын. Балаға асыҡ сырай, ышаныусан ҡараш, һәр ыңғай яҡтарына, бәләкәй генә уңыш-табышына ла ихтирамлы, баһалы мөнәсәбәт, туң күңелдәрҙе лә иретерлек дуҫтарса, тиңдәрсә, әсәләрсә йылы мөғәмәлә, хәстәрле тойғо, эскерһеҙ хис, ҡанатландырыусы йылы һүҙ, өмөт саткыларын баҙлатыр ялҡын кәрәк. Әгәр ана шундай сифаттар уҡытыусыла юҡ икән, бала һәр саҡ асылмаған бөрө булып ҡаласаҡ. Бәғерһеҙлеккә юлыҡһа, асылмаған бөрө атылырға торған уҡҡа, тупҡа әйләнә. Бындай һәләкәткә түгел, ә баланың һәләтенә, һәләтенең асылыуына, үҫеүенә юл ҡуйырға кәрәк. Балаға белем генә түгел, уны үҫтереүсе, һәләтенә аныҡ йүнәлеш, рухи сәләмәтлек биреүсенең уҡытыусылыҡ тәғәйенләнеше аша шул талаптарға яуап бирергә, тап килергә тейештер.

Кеше яңылышып та китә, кеше һүҙенә төшөп, төрлө хаталар ҙа эшләй. Бала ла бындай сифаттарҙан мәхрүм түгел. Шуға күрә баланы өйрәнеү һәм унан өйрәнеү зарур. Уны һәм унан өйрәнеп, уға өйрәтеү мөһим. Тәжрибәле һәм бала йәнле уҡытыусы ана шул принциптан сығып ойоштора дәрестәрен. Баланың тема буйынса яңылыш һөйләүен, яҙма эшендәге хаталарын да уҡытыусы үҙ иңенә ала. Мәҫәлән, «Һин яңылыш һөйләйһең», «Һин яҙма эшеңдә шунса хата ебәргәнһең», тип әйтеү бала күңелен яралай. Әлбиттә, хатаны төҙәтеү кәрәк. Ана шул төҙәтеү ҙә баланы уйландырырлыҡ, үҫтерерлек булһын. Мәҫәлән, «Был тема буйынса һин икенсе төрлө фекерҙәрәк икәнһең. Тимәк, мин үткән дәрестә ул теманы тулыһынса асып бирә алмағанмын, күрәһең. Әйҙәгеҙ, бергәләп шул хаҡта һөйләшәйек». Йәки: «Яҙма эштәрегеҙҙә шул урында тыныш билдәләре ҡуйылған (йәки ҡуйылмаған), тимәк, мин дәрестә ул ҡағиҙә буйынса күнегеүҙәр үткәрмәгәнмен икән. Күрәһең, ваҡыт етмәй ҡалғандыр. Булмаһа, әйҙәгеҙ, таҡтала шул ҡағиҙәгә һөйләм яҙайыҡ та күмәкләп тикшерәйек, хәтеребеҙҙә ҡалдырайыҡ» һ.б.

Күренеүенсә, бала иңендәге ауырлыҡты уҡытыусы үҙе күтәрҙе. Ана шулай һәр осраҡта ла юҡ ҡына хәлваҡиғаны ла, балаға япһармай, үҙеңә ҡабул итеү уҡытыусының абруйын класс алдында бермә-бер күтәрә. Уҡыусыларҙы ла шундай сифатҡа эйә булырға этәрә, ымлай, ишара яһай, уларҙың шик-шөбһәләрен, ҡурҡыу тойғоларын юҡҡа сығара, күңелдәрен үҫтерә, үҙ уҡытыусыһына ышаныс, ихтирам тойғоһон уята.

Уҡытыусы менән уҡыусының үҙ-ара мөнәсәбәтен ҙурға йәки бәләкәйгә, әһәмиәтле йәки әһәмиәтһеҙгә бүлеп ҡарамайҙар. Улар араһындағы үҙ-ара бәйләнеш, үҙ-ара мөнәсәбәт, бер-береһенә булған хис-тойғо һәм ҡараштың һәр береһе мөһим, әһәмиәтле һәм етди иғтибарға лайыҡ. Сөнки ана шул ике шәхестең үҙ-ара мөнәсәбәтендә халыҡ яҙмышы, ил яҙмышы ята, киләсәк тормоштоң бөтә булмышы хәл ителә. Ә инде ул мөнәсәбәттәрҙең башланмышы, артабанғы үҫеше уҡытыусы ҡулында, намыҫында.

Мәктәп шарттарында балаға уҡыу планына ярашлы төрлө фән нигеҙҙәренән белем бирергә ҡушылған. Баланың фекер йөрөтә алыу (белемде ҡабул итә аламы-юҡмы) һәләтен үҫтермәй тороп, күп һанлы һәм күп яҡлы мәғлүмәт даръяһына батырабыҙ ҙа, унан нисек теләһәң, шулай сыҡ, тигән һымаҡ ҡул һелтәп ҡуябыҙ. Шунан инде, был фәндән йәки теге фәндән бала өлгәшмәй, тип, уға хөкөм сығарыла. Теге йәки был фәндән баланың белеме бик самалы икән, бында уны ғәйепләргә ярамай. Үҙ фәнеңдә балаға аңлайышлы итеп төшөндөрә алаһыңмы? Ниндәй юлдар менән бала күңеленә үтеп инеп була? Дәрес материалың китапсанан ҡайһы яғы менән айырыла? Күңелеңдә эшкәртеү үткәрҙеңме? Дәрес материалына үҙ тәжрибәңдән, үҙ ҡарашыңдан сығып нимә булһа ла өҫтәнеңме? Әллә дәреслектә яҙылғанса тәҡдим итәһеңме? Ниндәй методик принциптан, алымдан сығып, дәрес материалын бала күңеленә һалаһың? Ана күпме һорауҙар торорға тейеш уҡытыусы алдында.

Уҡытыусы тағы ла шул турала белергә тейеш: дәреслек тип йөрөтөлгән уҡыу әсбабы аҡыл үҫеше, фекер йөрөтөү һәләте, психик һәм дөйөм үҫеше фәҡәт бер төрлө булған уҡыусыларға тәғәйенләнгән. Дәреслек авторы үҙ хеҙмәтен мәктәп шарттарында яҙмаған һәм уны тәбиғи уҡытыу барышында һынап та ҡарамаған. Кластағы балаларҙың аҡыл үҫеше бер кимәлдә түгел, ҡырылмаһа ҡырҡ ата балаһы йыйылған унда. Методик эшкәртелеше йәһәтенән дә мәктәп дәреслектәре бөгөнгө көн талаптарына яуап биреп бөтмәй. Унда урын алған күнегеүҙәр

һәм уларға тәғәйен биремдәр баланың күп яҡлы һәләтен үҫтереүгә йүнәлеш тотмай. Шуға күрә улар «яңы быуын дәреслектәре» тип йөрөтөлһәләр ҙә, уҡытыусы өсөн дә, уҡыусыға ла мотлаҡ ҡулланма вазифаһын үтәй алмай.

Дәреслектәге һәр күнегеү уҡытыусы тарафынан ижади эшкәртелергә, күнегеүҙәргә булған биремдәре үҫтереүле анализ һәм үҫтереүле синтез принциптары күҙлегенән төрләндерелергә тейеш. Класта эш үткәргәндә, йә булмаһа өйгә эш биргәндә күсереп яҙҙырыу кеүек фәҡәт бер төрлө күнегеүҙәр өсөн ваҡытты әрәм итергә ярамай. Һәр күнегеү (телдән йә яҙма рәүештә) баланы үҫтерерлек булһын, нимә тураһында булһа ла яңы мәғлүмәт бирһен, нимәгәлер өйрәтһен, ҡыҙыҡтырһын, артабан белем алырға, эҙләнергә мәжбүр итһен.

Уҡытыусыларҙың эш тәжрибәһендә анализдың байтаҡ төрҙәре ҡулланыла. Мәҫәлән: фонетик анализ, морфологик, синтаксик, лексик анализдар, теге йәки был өҙөктө стилистик яҡтан анализлау һ.б. Исеменән үк күренеп тороуынса, баланы һәр яҡлап үҫтереүгә йүнәлтелгән анализ төрҙәренә үҫтереүле анализ тип әйтелә.

Шулай итеп, үҫтереүле анализ уҡыусының:

— яҙыу һәм һөйләү телмәрен үҫтерә;

— күркәм фекер йөрөтөү һәләтен аса; шул нигеҙҙә ижади үҫешенә юл һалына;

— һөйләп асылыу мөмкинлеген тәьмин итә;

— рухи үҫешен формалаштыра һәм артабан үҫтерә;

— баланың килеп тыуған проблемаға үҙаллы ҡарашын үҫтерә;

— милли үҙаңын формалаштыра һ.б.

Бала күңеленә юл уға асыҡ сырай, иғтибарлы һәм ихтирамлы мөнәсәбәт аша һалына. Бала уҡытыусыға, уҡытыусы балаға таяныс, терәк булһын. Баланың эске донъяһын бала һәм үҙең өсөн асырға тырышырға кәрәк. Һәр кем йылы һүҙгә, дөрөҫ һүҙгә мохтаж була. Халыҡта «йылы һүҙ йән аҙағы» тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Ҡысҡырып өндәшеү, юҡ-барға класташтары араһында йөҙөн йыртырлыҡ һүҙ әйтеү, бала дөрөҫ яуап бирмәһә, «дөрөҫ түгел!» тип уның ауыҙын ябыу бала менән уҡытыусы араһындағы мөнәсәбәтте киҫкенләштерә, аралашыу, мөғәмәлә итеү сиге боҙола. Дәрестәме, дәрестән тыш сараларҙамы, һәр хәлдә бала менән мөнәсәбәт бар ерҙә уҡытыусы бала кимәлендә ҡалырға, бала хәленә инергә тейеш. Берәй ауырлыҡ кисергәндә «хәлеңә инерҙәй кешең булһын ине» тиҙәр халыҡта. Класта ниндәй генә хәл килеп тыуһа ла балаға ҡысҡырырға ярамай, үҙеңде тота, ҡулға ала белеү мөһим. Тәрән аҡыллы, кешелекле сифаттарға эйә булған кеше һәр саҡ үҙен тыныс тота, хатта берәйһе менән бәхәскә ингән саҡта ла үҙенең тыныс холҡо менән ота. Һәр урында, бигерәк тә балалар менән булғанда, үҙеңде тота белеү ҙур ҡаһарманлыҡ ул. Бала күңеленә ни яҙа алаһың? Ана шул турала уйланыу мөһим.

Класҡа ингәс, теге йәки был мәсьәләгә бала күҙлегенән ҡарау мөһим. Үҙең уның урынында булһаң, ул һорауға яуап бирә алыр инеңме? Ул яуап бирә алһын өсөн был һорауҙы ҡайһылайыраҡ үҙгәртергә мөмкин? Шул турала уйланыу кәрәктер уҡытыусыға.

Бала күңеленә яҡынайыу — уныңса уй-хыял йөрөтөү, уныңса эшләү, аҙ ғына булһа ла уның ыңғай ынтылышына дәрт, сәм өҫтәү, хыялына ҡанат биреү, ижади һәләтен күрә белеү, ул һәләтте үҫтереү, рухи һәм дөйөм үҫешенә өмөт сатҡылары ҡабыҙыу ул. Мәҫәлән, балалар баҡсаһында бала уйнаған уйынды уйнамаһам, талға атланып «сапҡан» бала менән бергә талға атланып йүгермәһәм — мин тәрбиәсе түгел. Ниндәй ҙә булһа уйын өйрәтер алдынан мин унан һорар инем: «Һин ниндәй уйын беләһең? Миңә өйрәт әле». Баланың уйынын өйрәнгәс, бергәләп уйнағас, үҙең теләгән уйыныңды уға өйрәтеп була. «Мин дә бер уйын беләм, өйрәнергә теләйһеңме? Теләһәң, әйҙә өйрәнәйек. Оҡшаһа, әйҙә уйнап ҡарайыҡ». Ана шулай баланың ышанысын яулау мөмкин. Күңелең йомшаҡ булһа, бала күңеленә сәскән изгелек орлоҡтарың юғалып ҡалмаясаҡ.

Түтәлгә сәскән орлоҡ та ҡулға ҡарай, кем ултыртыуына ҡарай. Берәү ни сәсһә лә үҫә, уңыш бирә. Ҡайһы бер кеше сәскән орлоҡ шытып та сыҡмай. Үргенләп үҫкән саҡта ла көтөлгән уңышты бирмәй. Бында ла кешенең күңеленә, эске донъяһына бәйләнгәндер. Күңеле йомшаҡ кешенең рухи донъяһы ла бай була, ул сәскән орлоҡ та шытып сыға, уңыш та бирә. Ҡаты күңелле кеше баҡсасы ла, уҡытыусы ла, тәрбиәсе лә була алмай.

Бала күңеленә юл бала ихтирамын яулау аша һалына. Баланы ихтирам итергә өйрән, күңелен үҫтер. Баланан өйрәнеү аша баланы өйрәт. Бала күңеленә илтеүсе юлдың башы ошо принципҡа нигеҙләнгән.